**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ И НАУКИ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН**

**МКУ отдел образования МР Учалинский район РБ**

**МБОУ СОШ имени героя Советского Союза Сунагатуллина Жавдата Гумурзаковича с.Имангулово муниципального района Учалинский район**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| на заседании ШМО учителей гуманитарного цикла | Заместитель директора по УВР | Директор школы |
| Янтурина Г.А. | Хисамова Э.Р. | Ахмедьянов Д.Р. |
| Протокол №1<br>от «29»августа 2025г. | | Приказ № 24<br>от «29»августа 2025г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**
**(ID 512713)**

**учебного предмета «Башкирский язык. Базовый уровень»**
для обучающихся 5-11 классов

с.Имангулово – 2025-2026 укыу йылы

## 5-се класс
## 68 сәғәт, аҙнаһына 2 сәғәт

**Аңлатма яҙыу**

Башҡортостан Президентының 1999 йылдың 15 февралендәге Указы менән башҡорт теле республикабыҙҙа, рус теле менән бер рәттән, дәүләт теле итеп раҫланды. Ошо указға ярашлы һәм Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы нигеҙендә республика мәктәптәрендә уҡытыу һәм тәрбиә биреү Концепцияһы төҙөлдө. Унда милли мәктәптәрҙә туған телдәрҙе уҡытыуҙың мөһим проблемалары, бурыстары һәм юлдары билдәләнде.

1995 йылда үткәрелгән Беренсе Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайы, башҡорт халҡын тергеҙеү, туған телде, тарих менән йолаларҙы, әҙәбиәт менән мәҙәниәтте өйрәнеү кәрәклеген билдәләп, тейешле ҡарарҙар ҡабул итте.

Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар. Башҡорт теле 5-9. Төҙөүсеһе: З. М. Ғәбитова. – Өфө: Китап, 2012. (Берненсе быуынын стандарт-тары).

Вариатив программа “Туған тел – рухи байлыҡ сығанағы”. Аҙнағолов Р.Ғ. “Башҡортостан уҡытыусыһы”, 12.2012.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Учалы районы Иманғол урта муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 2023/2024 уҡыу планына ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Эш программаһы 68 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт).

**Дәреслек:** Башҡорт теле.

**Программа кимәле :** базис.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**

1. Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар. Башҡорт теле 5-9.
2. (Төп дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәре өсөн ). Төҙөүсеһе: З. М. Ғәбитова. – Өфө: Китап, 2012. – (Икенсе быуын стандарттары).
3. Вариатив программа “Туған тел – рухи байлыҡ сығанағы”. Аҙнағолов Р.Ғ. “Башҡортостан уҡытыусыһы”, 12.2012.
4. Дәреслек: Башҡорт теле. Урта мәктәптең 5-се класы өсөн дәреслек. Автор-төҙөүселәре: В.Ш.Псәнчин һәм Ю.В. Псәнчин, З.М.Ғәбитова .Өфө: Китап, 2017.
5. Мәктәптә башҡорт теле уҡытыу методикаһы. Төҙөүсеһе: Р.Ғ.Аҙнағолов. – Өфө: Китап, 2011.
6. Мәктәптә һүҙ төркөмдәрен өйрәнеү. Т.Ә.Биҡҡужина. – Өфө: Китап, 2001.

7. Әсә теле дәреслегенә методик күрһәтмәләр – 5 класс. В.Ш.Псәнчин. – Өфө:Китап, 2007.
8. Башҡорт теленән тыныш билдәләре. И.Ә.Шарапов. – Өфө: китап, 2007.
9. “Башҡортостан уҡытыусыһы” журналы.
10. Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы. Х.А. Толомбаев, С.В.Атнағолова. – Өфө: Китап,2009.
11. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы. М.Ғ.Ғималова, С.М.Рәхимова. – Өфө: Китап,2009.
12. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы 5-11. Т.Я.Бикбаева, Т.Ы.Ҡунафина. – Өфө: Эдвис,2008.
13. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр. М.И.Баһауетдинова, Г.Н.Йәғәфәрова. –
Өфө: Информреклама, 2003.
14. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу.Төҙөүсәләре: М.И.Баһауетдинова,
Ғ.Н.Йәғәфәрова. – Өфө,2008.
15. Башҡорт теленән синыфтан тыш эштәр. Т.Ә. Бикҡужина. – Өфө: Китап,1997.
16. Ҡыҙыҡлы грамматика. З.Ғ.Ураҡсина, Э.Ф.Ишбирҙин, Г.М. Ҡотлобаева, М.Х.Әхтәмов. – Өфө: Китап, 1993.
17. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән тест һорауҙары. И.Ә.Шарапов. – Өфө: Китап, 2000.
18. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. Ә.С.Раҡаева, М.С.Дәүләтшина. –Өфө:Педкнига, 2008.
19. Әсә теле, 5 класс. Дидактик материалдар. Китап, Өфө-2009.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты :**

1. Дәреслек: Әсә теле. Урта мәктәптең 5-се класы өсөн дәреслек. Автор-төҙөүселәре: В.Ш.Псәнчин һәм Ю.В. Псәнчин,
Өфө: Китап, 2017.
2. Әсә теле – 5. Дидактик материалдар. Ю.В. Псәнчин. – Өфө: Китап,2009.

V—IXсиныфтарҙың программаһы әсә теленән булған барлыҡ эштәрҙең йөкмәткеһен һәм йүнәлештәрен үҙ эсенә ала. Ул йүнәлештәрҙең иң мөһиме — туған тел һәм туған әҙәбиәт дәрестәрендә белем менән бер рәттән тәрбиә биреүҙе тығыҙ бәйләнештә алып барыу.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**

- әҙәби телдең дөрөҫ әйтелеше, һүҙьяһалыш, грамматик һәм лексик нормаларын асыҡ, дөрөҫ үҙләштереү;
- уҡыусылар телмәренең грамматик төҙөлөшөн, һүҙ байлығын ишәйтеү;
- фекерҙе телдән һәм яҙып дөрөҫ, тулы итеп сағылдырыу.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы
тарафынан тәҡдим ителгән башҡорт мәктәптәре өсөн башҡорт теленән программа нигеҙендә. (V-XI кластартар өсөн. Төҙөүселәре:
В.Ш.Псәнчин һәм Ю.В. Псәнчин, Өфө-2002.) төҙөлдө.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Нуриман районы муниципаль районының Иҫке Күл ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһындафедеральһәм республика закондарыталаптарытормошҡаашырыла:**

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы

**Төп дөйөм белем биреү маҡсаттарын тормошҡа ашырыуҙа «Башҡорт теле» предметының өлөшө**

Башҡорт теле — башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала.

Туған телдең метапредмет белем биреү функцияһы мәктәптә белем алыу процесында бала шәхесен формалаштырыуҙа «Башҡорт теле» предметының универсаль, дөйөмләштереү характерын билдәләй.

Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; уҡыусыларҙың интеллектуаль һәм ижади һәләтен үҫтерергә ярҙам итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә; уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни-тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристика булып тора. Туған тел ул баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе; әхлаҡ нормалар позицияһынан сығып, үҙ ҡылыҡтарына дәлилле баһа биреү мөмкинлеген дә үҫтерә.

**Төп мәктәптә башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:**

**1)** туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, телгә ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү; туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау; туған телдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү;

2) көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм үҙ-ара фекер алышыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мөһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәрен (эшмәкәрлек маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан, Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ. б.) үҙләштереү;

3) тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү; стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштереү; актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; алынған белемде, күнекмәне аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

**Уҡыу предметына дөйөм характеристика**

Төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт теле курсының йөкмәткеһе белем биреү процесында метапредмет һәм предмет маҡсаттарына өлгәшеүгә йүнәлдерелгән. Был үҙ йәһәтендә коммуникатив, тел, лингвистик һәм мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙы һәм үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

*Коммуникатив компетенция* телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, аралашыуҙы, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

*Тел һәм лингвистик компетенция* йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ, лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел

күренеше факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

*Мәҙәни компетенция* туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, милли-мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Өлгө программала материал *коммуникатив-эшмәкәрлек* йүнәлештә бирелгән. Тәҡдим ителгән материал белем биреүҙе генә иҫәпкә алмай, ә эшмәкәрлек формаһын тормошҡа ашыра.

Беренсе (1 цифры аҫтында) тел һәм телмәр күренеше һәм уларҙың хәрәкәттә булыуын аңлатыусы лингвистик аңлатмаларҙың исемлеге бирелә. Икенсе (2 цифры аҫтында) тейешле аңлатмаларҙы өйрәнеү процесында эшкәртелеүсе төп уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлек төрҙәре һанап кителә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргәйүнәлтеү, кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

**Төп йөкмәткеле йүнәлеш**

Өлгө программа структураһында башҡорт теле курсының йүнәлеше коммуникатив, тел һәм лингвистик, мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙа сағылыш тапты. Унда күрһәтелгән компетенцияларҙы формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе өс бәйләнешле йүнәлеш билдәләнә:

- коммуникатив компетенцияны формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе йөкмәтке;
- тел һәм лингвистик компетенцияны формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе йөкмәтке;
- мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе йөкмәтке.

Беренсе йөкмәткеле йүнәлеш өлгө программала аралашыу телмәр күнекмәләрен аңлы рәүештә формалаштырыуға йүнәлдерелгән бүлектәр менән бирелә: «Телмәр һәм аралашыу телмәре», «Телмәр эшмәкәрлеге», «Текст», «Телдең функциональ төрлөлөгө».

Икенсе йөкмәткеле йүнәлештең бүлектәре телдең төҙөлөшө һәм тел берәмектәренең үҙенсәлектәрен сағылдыра: «Тел тураһында дөйөм белешмә», «Фонетика һәм орфоэпия», «Графика», «Морфемика һәм һүҙьяһалыш», «Лексикология һәм фразеология», «Морфология», «Синтаксис», «Телмәр мәҙәниәте», «Дөрөҫ яҙыу: орфография һәм пунктуация».

Өлгө программала бирелгән «Тел һәм мәҙәниәт» бүлеге телдең халыҡ тарихы һәм мәҙәниәте менән бәйләнештә булыуын асыҡларға ярҙам итә.

Уҡыу процесында күрһәтелгән йөкмәткеле йүнәлештәр бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә һәм интеграцияланған. Һәр бер бүлекте өйрәнеүҙә уҡыусылар тейешле белем һәм күнекмәләр генә үҙләштереп ҡалмай, ә

телмәр эшмәкәрлегә төрҙәрен камиллаштыра, төрлө коммуникатив күнекмәләрҙе үҫтерә, шулай уҡ, милли-мәҙәни феномен булараҡ, туған тел тураһында күҙаллауҙарын тәрәнәйтә.

**«Башҡорт (туған) теле» предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре**

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең сығарылыш уҡыусыларының башҡорт (туған) теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү әсән тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт (туған) теле программаһын үҙләштереүҙең **мета-предмет һөҙөмтәләре:**

1)телмәр эшмәкәрлегенең-бөтә төрҙәрен үҙләштереү: *аудирование һәм уҡыу:*

• телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

• төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

• төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);

• төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу әсән тәғәйенләнгән компакт-дискы-лар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә әсән әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;

• һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

• стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

*һөйләү һәм яҙыу:*

• алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллек-тив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

• тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

• төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;

• телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

• төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;

• ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;

• телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

• уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

• үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡуллалыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2) гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;

3) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика (тел ғилеме) һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары,

фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

5) башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;

7) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;

8) тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;

9) туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

**Тематик планлаштырыу.**

| № | Дәрестең темаһы | Сәғәт һаны | Үткәреү ваҡыты | |
|---|---|---|---|---|
| | | | план. | факт. |
| 1 | Исем, сифат, һан һүҙ төркөмдәрен ҡабатлау. | 1 | 02.09 | |
| 2 | Тикшереү диктанты.Көҙ етте. | 1 | 03.09 | |
| 3 | Һүҙбәйләнеш. | 1 | 09.09 | |
| 4 | Һөйләм.Хәбәр,һорау һәм өндәү һөйләмдәр. | 1 | 10.09 | |
| 5 | Һөйләмдең баш киҫәктәре.Йыйнаҡ һөйләм. | 1 | 16.09 | |
| 6 | Изложение. Ауыр хеҙмәт.(18-се бит) | 1 | 17.09 | |
| 7 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Тарҡау һөйләм. | 1 | 23.09 | |
| 8 | Аныҡлаусы. | 1 | 24.09 | |
| 9 | Тултырыусы. | 1 | 30.09 | |
| 10 | Хәлдәр. | 1 | 01.10 | |
| 11 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | 1 | 07.10 | |
| 12 | Контроль диктант.Көҙ күренештәре.(16-сы бит) | 1 | 08.10 | |
| 13 | Текст. | 1 | 14.10 | |
| 14 | Өндәш һүҙ. | 1 | 15.10 | |
| 15 | Ҡушма һөйләм. | 1 | 21.10 | |
| 16 | Һүҙлек диктант.Ҡушма һөйләм. | 1 | 22.10 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 17 | Тура телмәр. | 1 | 05.11 | |
| 18 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 11.11 | |
| 19 | Иҫкәртмәле диктант.Тәбиғәт биҙәктәре.(26-сы бит). | 1 | 12.11 | |
| 20 | Фонетика һәм графика.Өн һәм хәреф алфавит. | 1 | 18.11 | |
| 21 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. | 1 | 19.11 | |
| 22 | Редукция,элизия. | 1 | 25.11 | |
| 23 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. | 1 | 26.11 | |
| 24 | Айырыу һәм йомшаҡлыҡ билдәләренең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. | 1 | 02.12 | |
| 25 | Тартынҡы өндәрҙеңәйтелеше һәм дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 03.12 | |
| 26 | Телдән һәм яҙып һүҙҙәргә фонетик анализ яһау. | 1 | 09.12 | |
| 27 | Һүҙлек диктант.Өндәрҙең оҡшашыуы. | 1 | 10.12 | |
| 28 | Ижек,уларҙың төрҙәре. | 1 | 16.12 | |
| 29 | Баҫым. | 1 | 17.12 | |
| 30 | Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Фонетик анализ эшләү. | 1 | 23.12 | |
| 31 | Контроль диктант. Ҡара айғыр (33-сө бит) | 1 | 24.12 | |
| 32 | Лексика тураһында төшөнсә.Һүҙҙең мәғәнәһе. | 1 | 13.01 | |
| 33 | Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге.Омонимдар. | 1 | 14.01 | |
| 34 | Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе. | 1 | 20.01 | |
| 35 | Синонимдар. | 1 | 21.01 | |
| 36 | Антонимдар. | 1 | 27.01 | |
| 37 | Лексика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 28.01 | |
| 38 | Контроль изложение.Илем-Башҡортостан(30-сы бит). | 1 | 03.02 | |
| 39 | Һүҙьяһалыш һәм орфография.Тамыр һәм ялғауҙар. | 1 | 04.02 | |
| 40 | Ялғауҙарҙың төрҙәре. | 1 | 10.02 | |
| 41 | Тамыр һәм яһалма һүҙ. | 1 | 11.02 | |
| 42 | Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 17.02 | |
| 43 | Диктант. Йылыу сыҡкан ерҙә.(39-сы бит) | 1 | 18.02 | |
| 44 | Һүҙьяһалыш.Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары. | 1 | 24.02 | |
| 45 | Ҡушма һүҙҙәр,уларҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 25.02 | |
| 46 | Картина буйынса инша.Р.Ишбулатов.Өфөлә Еңеү | 1 | 03.03 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | байрамы. | | | |
| 47 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр.Һүҙ төркөмдәре. | 1 | 04.03 | |
| 48 | Исем.Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. яһалыу. | 1 | 10.03 | |
| 49 | Ялғауҙар ҡушыу юлы менән исем яһалыу. | 1 | 11.03 | |
| 50 | Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһалыу. | 1 | 17.03 | |
| 51 | Ҡыҫҡартыу һәм бәйләү юлы менән исем яһалыу. | 1 | 18.03 | |
| 52 | Исем һүҙ төркөмөн тикшереү тәртибе. | 1 | 24.03 | |
| 53 | Исем темаһын ҡабатлау. | 1 | 25.03 | |
| 54 | Контроль диктант.Йыр(51-се бит) | 1 | 07.04 | |
| 55 | Ҡылым.Ҡылымдарҙың заман,зат,һан менән үҙгәреше. | 1 | 08.04 | |
| 56 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. | 1 | 14.04 | |
| 57 | Борис Домашниковтың”Һаҙ томбойоғо сәскә ата” исемле картинаһы буйынса инша. | 1 | 15.04 | |
| 58 | Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар.Ҡылымдарҙың яһалышы. | 1 | 21.04 | |
| 59 | Ҡылымдың затлы формалары.Бойороҡ һөйкәлеше. | 1 | 22.04 | |
| 60 | Хәбәр һөйкәлеше. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының заман менән үҙгәреше | 1 | 28.04 | |
| 61 | Үткән заман. | 1 | 29.04 | |
| 62 | Хәҙерге заман | 1 | 05.05 | |
| 63 | Киләсәк заман | 1 | 06.05 | |
| 64 | Шарт һөйкәлеше. | 1 | 12.05 | |
| 65 | Теләк һөйкәлеше. | 1 | 13.05 | |
| 66 | Контроль диктант.Кемдәр шатлана? | 1 | 19.05 | |
| 67 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 20.05 | |
| 68 | Йомғаҡлау. | 1 | 26.05 | |

**6 -сы класс өсөн эш программаһы**

**2025-2026 уҡыу йылы**

**Аңлатма яҙыу**

**1.** Башҡорт теленән эш программаһы түбәндәге норматив документтарға нигеҙләнеп төҙөлдө:

-Төп белем биреү мәктәптәренең «Мәғариф тураһындағы» законға Федераль компоненттарҙың дөйөм белем биреү буйынса Федераль стандарттарына ярашлы дөйөм белем биреү учреждениелары өсөн Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан V-XI кластарға ярашлы программаһы. Программа авторҙары: В. Ш. Псәнчин, Ю.В. Псәнчин. – Ижевск, 2020 й.;

-Дәреслек: Солтанбаева Х.В.,Л.С.Балапанова авторлығындағы 6-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн башҡорт теле дәреслеге. -Өфө:Китап, 2020й.

Эш программаһы 8 бүлектән тора: «Аңлатма яҙыу»; уҡытыу фәненең дөйөм характеристикаһы; уҡытыу курсының базис уҡыу (белем биреү) планындағы урыны; "Башҡорт теле" фәнен өйрәнеүҙең шәхси, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре; программаның йөкмәткеһе; календарь-тематик план; материаль-техник ҡулланмалар, уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге, өҫтәлмә әҙәбиәт; уҡыу йылы аҙағында көтөлгән һөҙөмтәләр.

Бөгөнгө ижтимағи шарттарҙа мәктәп алдына башҡорт телен уҡытыуға ҡуйылған юғары талаптарҙан сығып, башҡорт телен өйрәнеү буйынса түбәндәге етди **бурыстар** йөкмәтелә:

- уҡыусыларға башҡорт теленең фонетикаһынан, лексикаһынан, һүҙьяһалыш менән грамматикаһынан, стилистикаһы менән пунктуацияһынан, шулай уҡ телдең ижтимағи тормоштағы функцияһы, телдең үҫеше хаҡында программала билдәләнгән күләмдә ныҡлы белем биреү;

- уҡыусыларҙың фекерләүен, танып-белеү һәләтлелеген үҫтереү;

- уҡыусыларҙа әсә теленең һүҙ байлығына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;
- уҡыусыларҙы, телдең орфоэпик, интонацион нормаларын күҙәтеп, дөрөҫ, асыҡ һәм тасуири уҡыу күнекмәләре менән ҡоралландырыу;

- балаларҙың орфографик һәм пунктуацион күнекмәләрен үҫтереү;

- башҡорт теленең байлығын, тасуирлау мөмкинлектәрен асыу аша уҡыусыларҙа туған телде өйрәнеүгә әүҙем ҡыҙыҡһыныу, туған телгә, туған халыҡҡа, Ватанға тоғролоҡ һәм һөйөү, ғәҙеллек, донъяға киң ҡараш, кешеләр араһында татыулыҡ, ата-әсәгә, туған халыҡтың быуаттар буйына тупланған тормош ҡағиҙәләренә, әхлаҡ нормаларына хөрмәт тәрбиәләү.

**башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:** 1)Туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, телгә ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү; туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау; туған телдең эстетикҡиммәттәрен үҙләштереү;

2)көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралышыу сараһы булараҡүҙләштереү; уҙ-ара аңлашыу һәм уҙ-ара фекер алышыуға һәләтлелекте үҫтереү;универсаль уҡыу хәрәкәттәрен(эшмәкәрлек маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү,библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан,Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ.б.) үҙләштереү;

3) тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү; анализлау, сағыштырыу,классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү;яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштереү;алынған белемде,күнекмәне аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

**2.Уҡыу предметына дөйөм характеристика**

Мәктәпкә юғары мәҙәниәткә эйә булған, грамоталы, һәр яҡлап камил булып өлгөргән, ил алдындағы изге эштәрҙе башлап йөрөүсе кешеләр әҙерләп сығарыу йөкмәтелгән. Ул мөһим бурысты заман талабынса хәл итеүҙә әсә теле ҙур роль уйнай.

Башҡорт теле – башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Башҡорт әҙәби теле — башҡорт милли мәҙәниәтенең нигеҙе, шуға күрә мәктәптәрҙә уны өйрәнеүгә төп урын бирелә. V-XI кластарҙың программаһы әсә теленән булған

барлыҡ эштәрҙең йөкмәткеһен һәм йүнәлештәрен үҙ эсенә ала. Ул йүнәлештәрзең иң мөһиме — туған тел һәм туған әҙәбиәт дәрестәрендә белем менән бер рәттән тәрбиә биреүҙе тығыҙ бәйләнештә алып барыу.

Программала уҡыусыларҙың туған телгә, һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныуын һәр саҡ үҫтерә барыу, туған телдең байлығын, төрлө һүрәтләү сараларын күрһәтеү, һүҙ һәм уның формалар төрлөлөгөн телмәрҙә ҡулланыуҙа ынтылыш тәрбиәләү, уҡыусыларҙы туған телдән ныҡлы, аңлы белем алырлыҡ итеп уҡытыу бурысы ҡуйыла.

Теоретик белешмәләрҙе үҙләштереү уҡыусыларҙың тел факттарын сағыштырыу, төркөмләү, фонетик, морфологик, синтаксик, орфографик, пунктуацион һәм башҡа төрлө анализ яһау кеүек практик эштәр барышында тормошҡа ашырыла. Әсә теле уҡытыусыларының хәҙерге шарттарҙа мөһим бурысы - уҡыусыларзың грамоталы яҙыу һәм әҙәби тел нормаларын күҙәтеп һөйләү телмәрен үҫтереү. Орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе өйрәнгәндә, уҡыусыларҙың ул ҡағиҙәләрҙе аңлауҙарын, хәтерҙәрендә тотоуҙарын тәьмин итеү,ҡағиҙәләрҙе миҫалдар менән дәлилләй алыуҙарына, дөрөҫ ҡулланыуҙарына ирешеү мотлаҡшарт булып ҡала.Башҡорт теле курсының ҡайһы бер темаларын үткәндә һәм бүтән предметтарҙы уҡытҡанда, оҡшаш мәғлүмәттәр, оҡшаш төшөнсәләр осрай. Оҡшашлыҡтар бигерәк тә туған әҙәбиәт, рус теле һәм әҙәбиәте, сит ил теле предметтарында күп. Телдең туған әҙәбиәт менән бәйләнеше телмәр үҫтереү программаһы менән дә билдәләнелә. Әҙәбиәт дәрестәрендә өйрәнелгән төрлөһүрәтләү, күркәмлек сараларын тел дәрестәрендә лә файҙаланырға кәрәк. Телдең теге йәки был күренештәрен (мәҫәлән, төрлө грамматик формаларҙың ҡулланылышы, һүҙҙәрҙеңбәйләнеү саралары һәм юлдары, төрлө синтаксик төҙөлмәләр иллюстрациялау өсөн әҙәбиәт дәрестәрендә өйрәнелгән әҫәрҙәрен миҫалдар алынырға тейеш).

Башҡорт телен рус теле менән (шулай уҡ сит ил теле менән дә) бәйләп уҡытыу өсөн мөмкинлектәр бигерәк күп. Бер үк һәм оҡшаш төшөнсәләр ике телдә лә бар. Тәржемә яһау, ике телдең факттарын сағыштырыу, уларзың оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәләү кеүек эштәре киң ҡулланырға кәрәк.

Тел күренештәре менән оҡшаш төшөнсәләр тарих (архаизмдар, тарихи һүҙҙәр,үҙләштерелгән һүҙҙәр, халыҡ тарихы, телдең, яҙыуҙың барлыҡҡа килеүе), география (телдәрҙең таралыуы, төркөмдәре), анатомия (телмәр органдары, телмәр механизмы), музыка (өн, тауыш, интонация, тембр) дәрестәрендә бар.

Был предметтарҙы өйрәнеү процесында уҡыусылар төрлө факттарҙы сағыштырырға,

анализларға, һығымталар яһарға, дөйөмләштерергә күнегәләр. Уҡытыусы башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың бүтән предметтарҙы өйрәнеү һөҙөмтәһендә алған белемдәренәтаянырға һәм шуның менән башҡорт телен башҡа уҡыу фәндәренә бәйләргәбурыслы.Предмет-ара бәйләнеш өйрәнелә торған материалды яҡшыраҡ аңларға һәм башҡорт теле буйынса төплө күнекмәләр формалаштырырға мөмкинлек бирәсәк.

Әсә теле программаһының һәр бүлеген, һәр темаһын өйрәнеү уҡыусыларҙың фекерләүен, телмәрен үҫтереүгә ныҡлы ярҙам итергә тейеш.

**Базислы укытыу планындағы урыны**

Иманғол ауылы төп дөйөм белем биреү мәктәбе ҡабул иткән уҡыу планы буйынса башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн эш планы башҡорт телен 6-сы класта аҙнаһына 2 сәғәт, йылына 68 сәғәт уҡытыуҙы күҙ уңында тота.

**3.“ Башҡорт теле” предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре**

**Шәхси һөҙөмтәләре** булып түбәндәгеләр тора:

1. башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интелектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен,уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2. башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау;туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү;үҙ телмәреңде камиллаштырырға ынтылыу;
3. аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.
4. **Метапредмет һөҙөмтәләре:**
5. Функциональ грамоталыҡтың мөһим индикаторы - предмет-ара статус: ***коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге*** (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тиңдәштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау); ***таныпбелеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге*** (проблеманы аныҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлау табыу, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү;

библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау; мәғлүмәти-комньютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б); ***регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте*** (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; уҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялау һ. б. тормошҡа ашырыу.)

6. Функциональ грамогалыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.
7. Функциональ грамотапыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәренән белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта моһим күнекмәләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1. Телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле,БР-һының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2. гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
3. туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү;
4. тел ғилеменең төп аңлатмалары:лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр аралашыуы,һөйләү һәм яҙма телмәр,монолог,диалогһәм уларҙың төрҙәре; функциональ стилдәр,текст,текст төрҙәре;телдең төп берәмектәре,уларҙың билдәләре һәм телмәрҙәҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;
5. башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын,башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6. телдең төп берәмектәрен,грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
7. һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен,һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ яһау;
8. тел-һүрәтләүсаралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу.

**Уҡытыу процесында ҡулланылған методик ҡулланмалар һәм техник саралар**

**Техник ҡулланмалар:**

Класс таҡтаһы,
мультимедиа ҡоролмалары (ноутбук,проектор, экран, колонкалар)

**Методик ҡулланмалар:**

1.”Башҡорт теле” 6-сы класс өсөн дәреслек. Х.В Солтанбаева, Л.С. Балапанова, Өфө: Китап, 2020.

2.Башҡорт теле программаһы.

3.Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән тестар.(5-9 кластар өсөн ) Шарапов. БМУИ нәшриәте Өфө.2007.

4.Толомбаев Х.А., Аҙнағолов С.В. Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы; Башҡорт мәктәптәренең 5-11-се класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2009..

5.Ғималова М.Ғ., Рәхимова С.М.Башҡорт теленән изложениелар йыйынтығы; Башҡорт мәктәптәренең 5-11-се класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2009..

**6-сы класс уҡыусыларынан уҡыу йылы аҙағында көтөлгән һөҙөмтәләр белергә тейеш төшөнсәләр:**

-һүҙҙең грамматик мәғәнәһе; тулы мәғәнәле һүҙҙәрҙең һан, эйәлек, килеш, хәбәрлек менән үҙгәреүе,сағыштырыу,артыҡлыҡ,аҙһытыу дәрәжәләре,һөйкәлеш,зат һәм заман; һүҙтөркөмдәрен классификациялау принциптары, үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре; һүҙтөркөмдәре булараҡ исем, сифат, һан, рәүеш, алмаш, ҡылым, ҡылым төркөмсәләре, сифатҡылым, исем ҡылым,хәл ҡылым,уртаҡ ҡылым,теркәүес ,бәйләүес, киҫәксә, мөнәсәбәт һүҙ, ымлыҡ;

-рус теленән үҙләштерелгән исемдәрҙең, сифаттарҙың дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы,ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы;

-эпиграф төшөнсәһенең билдәләмәһе, рәсми эш ҡағыҙҙары стиле хаҡында

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Туған тел тураһында әңгәмә. Мәҡәлдәр, шиғырҙар өҫтөндә эш. | 1 | 02.09 | |

төшөнсә, хикәйә тураһында төшөнсә.

**6-сы класс уҡыусыһы белергә тейеш күнекмәләр:**

-һүҙҙең грамматик мәғәнәһен билдәләү;

-үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айыра белеү;

-исем,сифат,һан, рәүеш,алмаш,ҡылым, теркәүес, бәйләүес,киҫәксә, мөнәсәбәт һүҙ, ымлыҡтарҙың төп морфологик билдәләрен һәм синтаксик ролдәрен әйтә белеү; исем,сифат,һан, рәүеш һәм алмаштарҙың төрлө ысулдар менән яһалышын белеү,стилистик үҙенсәлеген иҫәпкә алып,исем,сифат,ҡылым,һан,рәүеш, алмаштарҙы телмәрҙең төрлө формаларында һәм типтарында ҡуллана белеү; кеше һәм башҡа предметтарға,күренештәрҙе белдергән исемдәргә һорау ҡуя белеү; Морфологик анализ эшләргә өйрәнеү, ярҙамсы һүҙтөркөмдәрен һөйләмдәрҙә дөрөҫ ҡулланыу;

-рус теленән һәм башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һәм ҡулланма һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙа белеү;

-ҡатмарлы план төҙөү,текстың төп фекерен сағылдырыу маҡсатында эпиграфты ҡуллана белеү; текст эсендәге һөйләмдәрҙе бер-береһенә алмаштар ярҙамында бәйләй белеү;

